ШЭЖЭРЭ



*Дамир КҮСКИЛДИН*

# Иҙәш ауылы тарихынан

XIX быуат аҙағынан, башҡа яҡын-тирәләге тағы ике Бикбирҙенән айырмалы булараҡ, был ауыл Иҙәш-Бикбирҙе тип атала. Уға тиклем — Бикбирҙе, XVII—XVIII быуаттарҙа — Сәмит. Һүҙ Башҡортостандың иң көньяғында, Ейәнсура районында урынлашҡан Иҙәш ауылы тураһында барыр.

Үҙәк архивта һаҡланған халыҡ иҫәбен алыу документтары буйынса, 1816 йылдың 30 августында Бикбирҙе ауылында 24 хужалыҡта 140 ир-ат, 132 ҡатын-ҡыҙ көн итә. Ауылға исем биргән Бикбирҙенең улы Бирҙеғол 1815 йылда 70 йәшендә донъя ҡуя, ә Бирҙеғолдоң 33 йәшлек улы Исмәғил сотник була. Бикбирҙе лә сотник булырға тейеш.

Бирҙеғол 1745 йылғы, уның атаһы Бикбирҙе 1715 йылғы булыр. Ауыл 1750 йылдарҙан Бикбирҙе тип атала, ә уға тиклем, Ә.З.Әсфәндиәровтың "Западные башкиры" китабы буйынса, Сәмит ауылы булған. Сәмит (Шәмсетдин) ҡарт исеме менән ауыл 1600 йылдарҙан аталыуы мөмкин, йәғни XVII быуат башынан.

Ә Иҙәш һүҙе кеше исеме менән бәйле. Ундай исем архив документтарында осрай, йәғни йылға буйында Иҙәш исемле кешенең хужалығы була. Моғайын, йылға буйында бер генә хужалыҡ булмаған — һәр бер ауылда башта уҡ бер-береһенә туған, таяныс, терәк арҡаҙаштар килеп ултыра. Иҙәш йылғаһы буйы тамағына тиклем 40 саҡырымдан ашыу, ҡушылдыҡтары ла күп. Шул тиклем ерҙе үҫәргән ырыуының бик бай кешеһе билгән.

Шулай итеп, Иҙәш уҙаман һәм уның яҡындары XIV—XV быуаттарҙа, йәғни кәмендә 600 йыл элек ауылға нигеҙ һалған. Иҙәш ҡарт ябай башҡорт булмағандыр, ҙур түрә булыуы мөмкин.

Ергәйеш тә антропоним — кеше исеме. Уның атаһы Ҡорман. Ергәйештең улдары Аҡкош, Алсыбай, Сыуашбай, Далҡош, Һунарғол. Ергәйеш бай бик борон ауылға Еләкле аҡланында (хәҙер Малиновкала) нигеҙ һала, һуңынан хәҙерге урынына күсә. Бикташ һәм Буранғол ауылдарынан Ергәйешкә 1807 йылда күсә башлайҙар. Урядник Әбүләйес Әбсәләм улы Бикбов ваҡытында, 1857 йылда, рәсми рәүештә уның исеме менән ауыл булып иҫәпләнә.

Бишенсе рәүиз буйынса, 1795 йылда Бикбирҙе (Сәмит) ауылы Үҫәргән улусына ҡарай, 25 хужалыҡта 138 кеше йәшәй. Әммә исемлек Өфө архивында юҡ.

Ауылдың боронғо тарихына байҡау яһағандан һуң, тағы 1816 йылғы ревизияға әйләнеп ҡайтайыҡ.

XIX быуат башында Бикбирҙе ауылы 9-сы башҡорт кантонының 1-се бүлексәһендә иҫәпләнә. Ауылда йорт старшинаһы 36 йәшлек Наурузйән (1780—1861) һәм 35 йәшлек есаул Абзан Арғынбаевтар йәшәй. Наурузйән 1796 йылдан казак булып хеҙмәт итә башлай, 1809 йылда зауряд-сотник дәрәжәһендә ҡырғыҙ-ҡайсаҡтарға ҡаршы походта ҡатнаша, 1814 йылда — дистанция начальнигы, 1817 йылда — йорт старшинаһы, 1822 йылда 14-се класлы дәрәжә ала, 1830 йылда старшиналыҡтан бушатыла.

Арғынбайҙың атаһы һуңынан дворян дәрәжәһе алған Ҡыуат Кинйәғол улы була, 1720 йыл тирәһендә тыуа. Байыш ауылынан мулла Муса төҙөгән шәжәрә буйынса, Кинйәғолдоң атаһы Ирек, уның атаһы Турай, уның атаһы Сәлмән (Сәлимйән) сама менән 1610 йылғы. Арғынбай Ҡыуатов ауылда мулла вазифаһын башҡара. Ул 1811 йылда вафат булғас, Абдулла Ғәббәсов муллалыҡҡа һайлана.

1816 йылда йәшәгән йорт хужаларына тағы туҡталайыҡ, сөнки уларҙың исемдәре күптәргә фамилия биргән. Тәүге өс хужалыҡ юғарыла әйтелгән старшина Наурузйән, есаул Абзан һәм Сынтимер (Йәнтимер) Арғынбаевтарҙыҡы (хәҙер Ҡыуатовтар). Дүртенсеһе сотник Исмәғил Бирҙеғолов, бишенсе һәм алтынсы хужалыҡтар — есаул Ҡәҙербай (47 йәш), уның ағаһы Ҡыуандыҡ (55 йәш) — икеһе бер хужалыҡ алып барған, һәм Һөйөндөк Ҡотлогилдиндар йәшәй. Тимәк, хәҙер ауылда киң таралған Ҡәҙербаевтар, Ҡыуандыҡовтар һәм Һөйөндөковтар (һуңынан Фәйзуллиндар һәм Абдуллиндар) бер-берећенә туған. Мусаҡаевтарға исемшәриф биргән Мусаҡай Таһировҡа 66 йәш, тағы бер есаул Нурғуша Ҡотлогилдин 40 йәштә, Байдәүләт Ибентаровҡа 31 йәш, хорунжий Сирә-Сиреғол (һуңынан Сиреғоловтар) Арыҫлановҡа — 46, ағалары Саматҡа — 55, Һайранға — 54, ҡустыһы есаул Тәкәйгә 42 йәш.

Ул заманда ауыл халҡының төп кәсебе — малсылыҡ, игенселек. Башҡорттар хәрби сословиеға ингәс, дәүләт алдындағы төп йөкләмәһе — хәрби хеҙмәт. Шуға күрә ҡулына ҡорал тота алған ир-аттың күбеһе хәрби хеҙмәттә була, сикте һаҡлай, һуғыштарға йөрөй. Шуның өсөн ауылда хәрбиҙәрҙең күп булыуы осраҡлы түгел.

Беҙгә исем-шәриф биреүсе шәхескә туҡталайыҡ. Атайым мәрхүмдең әйтеүенә ҡарағанда, ауыл борондан Иҙәш тамағында, хатта бер нисә йорт Ҡаҫмарттың һул яғында ла урынлашҡан. Элекке карта буйынса ла шулай.

1745 йылда Ҡәйептең хәләл ефете ир бала таба. Ҡәйеп шатланып, табын йыйып, аҡһаҡалдарҙы саҡырып, ғаиләгә, ырыуға ярҙам, көс килде, тип иғлан итә һәм улына Көскилде тип исем ҡуша. Был исем замандында башҡорт ерендә киң таралған була. Ләкин бындай фекер менән ғалим Рәшит Шәкүр килешмәй — "күс килде" һүҙҙәренән алынған тип иҫәпләй ул. Пугачев ихтилалы башланғанда Көскилде ир-егет булып етә — 28 йәш тула. Беҙҙең яҡ башҡорттары был һуғышта әүҙемлек күрһәтмәһәләр ҙә, уның дуҫ-иштәре менән бергә ҡатнашыуы ихтимал. Сөнки ул, әйтеүҙәренә ҡарағанда, батша хакимиәте эҙәрләүенән бер аҙ йәшеренеп тә йөрөй. Ул оҫта тимерсе була, ҡорал яһай, самауыр төҙәтә.

Көскилде Ҡәйепов 1816 йылда 71 йәшендә вафат була. Уның улы хорунжий Байгилдегә ул саҡта 33 йәш, уның улдары Байсәләмгә — 7, Төхфәтуллаға — 2, ҡыҙҙары Шәһәрбуҫтанға — 4, Шәһәрбаныуға 3 йәш. Байгилденең әсәһе Мөкминәгә — 55, ҡатыны Зәғифәгә 35 йәш. 1746 йылда Ҡәйептең икенсе улы тыуа. Ул Ураҡай исемле, һуңынан Ураҡаевтарға ошо исем-шәриф бирелгән.

Тирә-яҡ ауылдар тураһында ла бер нисә һүҙ. Үтәғолда 12 хужалыҡ булып, 64 ир-ат, 48 ҡатын-ҡыҙ көн итә. Нигеҙ һалыусы сотник Үтәғол Мусин (63 йәш). Юнайҙа — 9 хужалыҡ, 45 ир-ат, 53 ҡатын-ҡыҙ (тирә-йүндәге ауылдар менән сағыштырғанда, бында ҡатын-ҡыҙҙар һаны күберәк). Ауылға нигеҙ һалыусы Юнайҙың улдары Юнаевтар: Шоңҡарға — 70, Урманбатҡа (күптәргә фамилия биргән) — 67, Базирға (бәлки, Басир?) 57 йәш. Байышта — 14 хужалыҡ, 86 ир-ат, 65 ҡатын-ҡыҙ. Ағурҙала 6—41—23, Иҫәргәптә 7—37—30, Бикташта (Аҡбулат) 13—89—66, Буранғолда (Бараҕол, хәҙер юҡ, Ҡыуатовтарҙан Ҡаһарман, Таһир, Әлмөхәмәт кантондар ауылы) 12 хужалыҡта 64 ир-ат, 60 ҡатын-ҡыҙ.

1834, 1850 йылдарҙа ла халыҡ иҫәбен алыу үткәрелгән, ләкин ауылыбыҙ тураһында ул йылдарҙағы ҡағыҙҙар архивта һаҡланмаған. 1859 йылдың 15 февралендә үткәрелгән 10-сы ревизияла ауыл тураһында мәғлүмәт һаҡланған. Был ваҡытта Бикбирҙе ауылы 3-сө башҡорт кантонының 2-се ғәскәри йортона ҡарай: 93 хужалыҡ, 335 ир-ат, 330 ҡатын-ҡыҙ. Ауылда үҫәргән ырыуының әпәнде түбәһе кешеләре йәшәй. Исемлектә беренсе булып башта әйтелгән Наурузйән Арғынбай улы Ҡыуатов яҙылған, 80 йәш (1861 йылда вафат була). Ике ҡатынынан үҙе менән торған алты улы бар, иң кеселе Мирхәйҙәргә 14 йәш, айырым торған тағы дүрт улы бар. Шәрәфетдине 1860 йылдан — йорт старшинаһы.

1812 йылдағы Ватан һуғышы батыры, тархандар затынан булған хорунжий Хөсәйен Күсәрбаев (1780—1851) исемлектә икенсе. 1797 йылдан ябай казак булып хеҙмәт итә, 1807 йылдан — зауряд-есаул, 1818 йылдан — прапорщик, 1824 йылдан — хорунжий. Ул Данцигты штурмлағанда күрһәткән батырлыҡтары өсөн Изге Анна ордены, һуңынан "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн", "1812 йыл иҫтәлеге" көмөш миҙалдары менән бүләкләнә. Улы зауряд-хорунжий Абдрахманға 34 йәш.

Зауряд-сотник Шаһиморат Ғайсаровтың (1801—1860) ҡатындары — Ҡунаҡбикә 64 йәштә, Гөлзаһира 35 йәштә, ике улы 39 һәм 29 йәштәрҙә. Был сотник исемлектә дүртенсе. Өсөнсөһө 1852 йылда вафат булған Ғәзизйән Арғынбай улы Ҡыуатов. Тол ҡатыны Баянға 58 йәш.

Исемлектә күрһәтелгән 82-се хужалыҡта 56 йәшлек Байсәләм Күскилдин 6 йәшлек улы Ҡужәхмәт (атайҙың ҡартатаһы) һәм 2 йәшлек икенсе улы Солтанәхмәт (1860 йылда үлә), ҡатыны 44 йәшлек Зәғифа Йомалина, 14 йәшлек ҡыҙы Гөлгизәрә менән тора. Икенсе документтарҙа тамғаһы табылды — әүернә (свастика).

83-сө хужалыҡта 46 йәшлек Төхфәтулла Байгилдин яҙылған (фамилияһы атаһының исеме буйынса), ҡатынына 20 йәш. Уның тәүге ҡатынынан улдары Абдулмаһиянға — 20, Ғәлиянға 18 йәш. Тағы Абдулмәжит һәм Әғзәм исемле улдары була. Абдулмаһиян Төхфәтулла улы

Күскилдин 60—70-се йылдарҙа ауыл мәсетендә мөҙәрис вазифаһын башҡара, мәҙрәсәлә уҡыта.

Ураҡаевтар ҙа ике ғаилә яҙылған, һуңынан улар ныҡ арта: 1920 йылда исемлектә 7 хужалыҡ яҙылған, Күскилдиндар — берәү, ә Байгилдиндар икенсе ауылға күскәндәр, улар исемлектә юҡ. 1926 йылғыһында улар ике хужалыҡ.

Алтынсы урында 1858 йылда вафат булған һәм ауыл зыяратында дәфен ҡылынған мулла Мәхрәм (Мөхәррәм) Ҡотлогилдин, 27 йәшлек улы Әбделҡадир, уның ҡатыны, ҡыҙы яҙылған. Уға тиклем ауыл мәсетендә Абдулла Ғәббәсов 30 йылдан ашыу мулла булып йөрөй. 1846 йылдың 2 ноябрендә 49 кеше мулла менән ризаһыҙлығын белдергән, ҡайһы берәүҙәре имзаларын ғәрәпсә яҙып, икенселәре тамғаларын ҡуйып, Диниә назаратына хәбәр итә, һәм 45 йәшлек указлы имам Мәхрәм Ҡотлогилдинды мулла итеп һайларға теләк белдерә. Унан һуң Әбделғәни Наурузйән улы Ҡыуатов указлы мулла була. 10 йылдан һуң, 1869 йылдың ноябрендә "...часть жителей деревни Идяш-Бикбердиной хотели удалить муллу из-за дурного противозаконного поведения, непосещение молитвы и избрать Кутлуахмета Сындавлетова. По распоряжению Духовного собрания 23 декабря 1875 года Абдулгани Куватов удален от исполнения должности на один год. Через год, в 1877 году опять допущен в Бикбердинскую соборную мечеть имамом", тип яҙылған Диниә назараты фондындағы бер документта. 1884 йылдан имам-хатип вазифаһын Уразов Хәмит Ҡолмөхәмәт улы башҡара, мәзин-мөғәллим Имулдин Ҡорманғәли Мөхәмәтғәли улы була.

Юнайҙа 1812 йылда уҡ мәсет төҙөргә рөхсәт һораһалар ҙа, ул тик 90-сы йылдарҙа ғына асыла. Үтәғолда мәсет 1910 йылда төҙөлә. 1911 йылдан мәсеттең указлы имам-хатибы итеп Дәүләтшин Ниғмәтулла Йосоп улы тәғәйенләнә.

Яҡын тирәләге мәсет Ергәйештә (Әбүләйес) 1850 йылдарҙан асыла. Унда 1904 йылдан имам — Сөләймәнов Мөхтәбәр, 1911 йылдан икенсе имам — Бикташев Камалетдин Динмөхәмәт улы, мәзин — Абдулнасиров Абдулҡәйүм Бикмөхәмәт улы. 1912 йылдан имам булып Бикташев Сәйфелмөлөк Динмөхәмәт улы (минең олатай, әсәйҙең атаһы) һайлана. Ул 1915 йылда армияла полк муллаһы хеҙмәтен үтәй. Бер йылдан Австрияла әсирлектә вафат була.

Динмөхәмәттең атаһы Бикмөхәмәт (1790—1862), уның атаһы Бикташ Бикбов (1745 йылғы) Бикташ ауылына нигеҙ һалған. Хәҙер ул ауыл юҡ, 1934 йылдан Ырымбур өлкәһендә ҡала. Ергәйештән 7—8 саҡырымда.

Бикташтың атаһы Тимербулат, артабан Ямансура — Түлебай — Ҡушҡарбай — Кинйә бән Бикбау-кенәз. Бикбау-бей XVI быуатта үҫәргән ырыуы башлығы булып, Нуғай Урҙаһына ҡаршы көрәште етәкләй. Шәжәрә һәм башҡа тарихи сығанаҡтар буйынса, Башҡортостандың Рәсәй дәүләтенә ҡушылыу шарттары тураһында һөйләшеүҙә ҡатнаша. Батша уға тархан дәрәжәһе бирә, ергә хоҡуҡ менән "бүләкләй".

Һаулыҡ һаҡлау кимәле түбән булғанғалыр, төбәктә йоғошло ауырыуҙар йыш ҡабатлана. 1853—1854 йылдарҙа вабанан (холера) күптәр үлә.

1862 йылда ғына 27 ҡатын-ҡыҙ үлә, ир-аттар араһында үлеүселәр аҙыраҡ. 1864 йылда төрлө ауырыуҙарҙан, бигерәк тә "йөрәк, йүтәл, шешек рәнйеүенән" 14 ир-ат, 9 ҡатын-ҡыҙ донъя ҡуя. Шуларҙың яртыһы тип әйтерлек бала-саға. 1866—1868 йылдарҙа ҡайтармалы биҙгәктән күптәр вафат була.

70-се йылдар башында Иҙәш, Үтәғол, Юнай ауылдарында кеше һаны йылдам арта, йәғни тыуған балалар һаны үлеүселәргә ҡарағанда күберәк. Мәҫәлән, Иҙәш мәсетенә ҡараған шул өс ауылда 1871 йылда 7 ир-ат, 3 ҡатын-ҡыҙ үлһә, 23 малай, 19 ҡыҙ, йәғни 42 бала тыуа, артым — 23 кеше. 1872 йылда 21 кеше үлә, 45 кеше тыуа, артым — 34 кеше. Артабан:

1872 йыл — 15 — 47 — 32;
1874 йыл — 10 — 51 — 41;
1875 йыл — 10 — 45 — 35;
1876 йыл — 24 — 44 — 20.

1877 йылда артым — 30 кеше. Һуңынан ауылдарҙа артым күп түгел. 1878—1880 йылдар бик ҡоро килә, унан һуң да йылдар ауыр була — артым 10 кеше самаһы ғына.

1885 йылдан ауылда ике мәсет эшләй. 90-сы йылдарҙа артым күберәк. XX быуат башынан беренсе донъя һуғышы башланғансы кеше һаны шәп үҫә.

Ауылда мәсет XVIII быуатта уҡ төҙөлә. Мәсет эргәһендә мәҙрәсә лә була. Мәҙрәсәлә малайҙарҙы мөғәллим, ҡыҙҙарҙы мөғәллимә уҡыта. Ҡыҙҙар баштарына һиҙйәп ябынып, малайҙар түбәтәй кейеп йөрөй.

1866 йылда Ырымбур губернаһында 108 малай уҡыған 5 башҡорт мәктәбе эшләй. 150 мәҙрәсәлә 4475 малай, 312 ҡыҙ уҡый. Өфө губернаһында мәктәптәр һаны күберәк була.

1909 йылда ауыл халҡы өмә ойоштороп, Болан йылғаһы буйында ағас ҡырҡып, бер бүлмәле мәктәп төҙөй. Земствоның башланғыс мәктәбе була. Малайҙар һәм ҡыҙҙар бергә уҡый, мәҙрәсәлә — айырым. 1912 йылда мәктәп ике бүлмәле итеп киңәйтелә. 1918—1919 уҡыу йылына тиклем уҡыу бушлай.

1920 йылдан земство мәктәбе үҙгәртелеп, беренсе баҫҡыслы совет мәктәбе ойошторола. 15 майҙа яҙылған отчет буйынса, ауылда ике уҡытыусы эшләй:

1. Илбулдин Абдулла Ҡорбанғәли улы, 21 йәш. Мәктәптә ике йыл эшләй, урта белемле. Сәнкем-Биктимерҙә һәм Сабатарҙа курстарҙа уҡыған, аҙнаһына 24 сәғәт уҡыта. Атаһына 65 йәш (1859 йылдағы рәүиздә: №92. Ильбулдин Мухаметгали — 43 года, сыну Курбангали — 2 года), әсәһенә — 50, ҡатынына — 35, улына — 2, һеңлеләренә — 6, 20, ҡустыһына 13 йәш. Һуңынан Абдулла Ҡорбанғәли улы муллалыҡҡа күсә.

2. Ишкинин Муса Зәйнетдин улы, 32 йәш, был мәктәптә 3 йыл эшләй, урта белемле, курстарҙа уҡыған. Ҡатынына 30 йәш, ҡустыларына — 14, 24, улына — 3, ҡыҙына 7 йәш.

Икеһе лә уҡытыусы булғансы иген үҫтергән.

1919 йылда эш хаҡына 1740 һум түләнгән. Фронт зонаһы булғанға 10 процентҡа күберәк түләнә.

1920 йылдың 15 майына уҡыусылар һаны:

| | | | |
|---|---|---|---|
| I төркөм | 33 малай, | 16 ҡыҙ, | бөтәһе 49 бала |
| II төркөм | 20 | 6 | 26 |
| III төркөм | 5 | — | 5 |
| Барлығы | 58 | 22 | 80 |

6 дүрт урынлы парта, 2 таҡта бар. Әсбаптар бик аҙ: 1 яҙыу, 2 уҡыу, 3 тарих, 5 арифметика, 7 әлифба китабы — былары ла земство заманынан ҡалған. 1922 йылда уҡытыусы булмау сәбәпле, уҡыу 15 декабрҙә башлана. 31 малай уҡырға йөрөй.

Аслыҡ йылдарында, бюджеттан аҡса бүленмәгәс, мәктәп ябыла. Һуңынан отчет ҡағыҙҙары юғалған. 1923 йылда Әбүләйес мәктәбе буйынса отчет бар, беҙҙең ауылдыҡы юҡ.

1926 йылдың 2 декабрендә яҙылған отчетта Иҙәш-Бикбирҙе ауылы Йылайыр кантонының Үтәғол улусына ҡарай. Мәктәп 4 йыллыҡ. Улус бюджетынан уҡытыусыға эш хаҡы 35 һум, йыйыштырыусыларға — 12 һум 60 тин, хужалыҡ сығымдары — ауыл халҡынан. 36 малай, 12 ҡыҙ уҡый.

I төркөмдә (һуңынан — класс, синыф) 28 малай, 12 ҡыҙ була. 8 йәшлектәр 8 бала, 9 йәшлектәр — 3, 10 — 7, 11 — 9, 12 — 6, 13 — 6, 14 йәшлек — 1. Бөтәһе 40 бала. II төркөмдә 8 малай, шул иҫәптән 13 йәшлектәр — 5, 15 йәшлектәр — 3.

Отчетҡа ус аяһындай бер ҡағыҙға өҫтәп яҙылған: мәктәп йәшендәге балалар һаны 112. Урын булмағас, күптәр уҡый алмай. Уҡытыусы бүлмәһе юҡ, инвентарь аҙ — парталар, әсбаптар етешмәй, китапхана юҡ.

Ике төркөмдә лә бер уҡытыусы эшләй — Нурлығаян Хафиз улы Ҡадиров. Тәүҙә Иҙәштә, һуңынан 50-се йылдарға тиклем Ергәйештә уҡыта. Һуғыштан һуң Ленин ордены менән бүләкләнә. Күптәр Ҡадиров ағайҙы йылы һүҙҙәр менән иҫкә ала. Киске уҡыу-ликбез асып, ир-егеттәргә яңәлиф танырға өйрәтә, тормош юлын һайларға ярҙам итә. Ағайҙың улы Урал Иҙәштә 1929 йылдың мартында тыуа. Ул хәҙер аграр университетта профессор. Уның ветеринария буйынса яҙған китаптарын бөтә Рәсәй студенттары өйрәнә.

1926 йылда уҡыу 1 ноябрҙән 1927 йылдың май башына тиклем дауам итә — бөтәһе 130 көн. Перепись булыу сәбәпле, 19 көн уҡымайҙар, улус конференцияһы ваҡытында — 7 көн, яҙғы сәсеүҙә 26 көн уҡыу булмай. Байрамдарға 28 көн, урындағы байрамға 2 көн тура килә. Ҡышҡы һәм яҙғы каникул булмай, йәйгеһе 122 көн. Берәр һумдан 20 йөк утын яғыла. Уҡытыусыға йылына 462 һум, ҡараулсыға 30 һум, ремонт өсөн 33 һум түләнгән. 15 әлифба, 4 тарих, 15 арифметика, 2 география, 9 тәбиғәт, 46 уҡыу китабы, 2 географик карта бар.

Класс бүлмәһенең оҙонлоғо 8,7 метр, киңлеге 5 метр, бейеклеге 2,4 метр, 7 тәҙрә, яҡтылыҡ һул яҡтан, түшәм тәпәш. Мәктәпте ҡайһы берҙә йыйылыш өсөн, ҡыҙыл мөйөш, медпункт итеп, спектакль ҡуйыу өсөн файҙаланғандар.

1928 йылда II төркөмдә 15 малай, 9 ҡыҙ, III төркөмдә 18 малай, 4 ҡыҙ — бөтәһе 42 уҡыусы. 26 уҡыусыға 19 һумлыҡ ярҙам күрһәтелгән. Уҡытыусыларға улус бюджетынан 835 һум түләнгән, кешеләрҙән 19

һум йыйылған. 1929 йылдың ноябрендә төҙөлгән отчет буйынса, мәктәптә ике уҡытыусы эшләй:

1. Әлбәкова Хөбәйбә Хилаж ҡыҙы, 1905 йылғы. Эш хаҡы 55 һум. 1927 йылдан эшләй. Кейәүгә сыҡмаған.

2. Ҡадиров Нурлығаян Хафиз улы, 1894 йылғы, башҡорт, туған теле татарса, сығышы — крәҫтиән. Мәктәп мөдире һәм уҡытыусы. Эш хаҡы 57 һум 20 тин. Мәғарифта 1919 йылдан эшләй.

Тимәк, беҙҙә 20-се йылдар аҙағында балаларҙың 40—45 проценты ғына уҡый алған. Күренеүенсә, 1928 йылға тиклем бюджеттан бер уҡытыусы өсөн генә аҡса бүленә. Һуңынан икәү булһалар ҙа, 4 йыллыҡ (башланғыс) мәктәп булғас, 4 синыфҡа 4 уҡытыусы кәрәк була. Мәктәпте киңәйтергә, уҡыу әсбаптары алырға, китапхана ойошторорға, хатта бер уҡытыусыға мөдирлек өсөн 3—4 һум түләргә, заманына ярашлы уҡыу шарттары булдырырға бюджеттан аҡса бүленмәй.

Совет власы ун йыл эсендә ҙур еңеүҙәргә иреште, тип һөйләһәләр ҙә, ысынбарлыҡта, бигерәк тә төпкөл ауылдарҙа ана шул власть килтергән бөлгөнлөктән һаман сыға алманылар. Шуның өсөн 1930—1931 уҡыу йылынан бөтөнләй башланғыс белем алыуға күсеү ҡағыҙҙа ғына ҡалды.

Былары мәғариф буйынса. Шундай уҡ хәл һаулыҡ һаҡлауға һәм башҡа мәсьәләләргә лә ҡағыла. Хөкүмәт кешеләрҙән төрлө юлдар менән һәр төрлө һалым йыйыу, бөлгөнлөккә төшкән батрактарҙан төҙөлгән колхоздарҙы талау, хәлле йәшәгәндәрҙе, кулак тип, мөлкәтен тартып алып, үҙҙәрен юҡ итеү яғын ҡараны.

1920 йылдағы перепись ҡағыҙҙары — ”подворные карточки” Үҙәк архивта һаҡланған, ләкин унда йорт хужаһының исеме, йәше, ә ҡалған ғаилә ағзаларының тик йәше генә яҙыла, исемдәре юҡ. Ауылда 128 хужалыҡта 394 ир-ат, 350 ҡатын-ҡыҙ, бөтәһе 744 кеше була. 28 ир-егет армияла. Йорт хужаларының 22-һе алтмышты уҙған, шуларҙың өсәүһе 80 тирәһендә. 10—15 ат тотҡандары ла бар. Мусаҡаев Ғәбделмөьминдең 20 аты, 11 һыйыры, Мусаҡаев Мәнәфтең 18 аты, 10 һыйыры, Ҡыуандыҡов Бикмырҙаның 15 аты, 5 һыйыры, Ҡыуандыҡов Хөснөтдиндең 14 аты, 6 һыйыры була. Шулай ҙа күбеһе 4—5 ат тота, 1—2 атлылар һирәк, һарыҡ һәм кәзәләре, ҡош-ҡорто, умартаһы, арба-санаһы, эш ҡоралы, белеме, эшкә һәләтлеге, күпме ер эшкәртеүе һәм башҡалар иҫәпкә алынған. Иншалла, ауыл халҡы ул йылдарҙа хәлле йәшәгән. Дөйөм күрһәткестәр буйынса, 169 ир-ат, 173 ҡатын-ҡыҙ хеҙмәткә һәләтле. 3 хужалыҡтың мал-тыуары, 8 хужалыҡтың эш малы, 9 хужалыҡтың һыйыры юҡ — былары өлкән йәштәгеләрҙеке.

Ауылда аттар һаны 525, йәғни хеҙмәткә һәләтле һәр бер ир-егеткә өсәр ат тура килә. Эре мөгөҙлө мал һаны ла шул сама һәм һәр бер хеҙмәткә яраҡлы ҡатын-ҡыҙға ла өсәр баш мал тура килә. Бер төрәнле һабан — 48, ике төрәнлеһе — 11, күп төрәнлеһе — 1, 126 салғы, 236 дана ураҡ, 2 лобогрейка — ашлыҡ урғыс, бесән сапҡыс, ат сәскесе һәм тырмаһы була ауылда.

Бер йыл да үтмәй, Совет власы Башҡортостан Хөкүмәте менән төҙөгән Килешеүҙе боҙа башлай, төрлө яҡтан сикләй, эшләргә бирмәй. 1920 йылдың июнендә Вәлидов хөкүмәте илдән китергә мәжбүр булғас, беҙҙең яҡтарҙа Мәскәү хакимлығы ныҡлы урынлаша. Сельсовет, комбед, прод-

разверстка, хәрби коммунизм, большевик, комсомол ячейкалары, синфи көрәш ойошторола. Ауыл советының тәүге рәйесе Әйүп Күскилдин (минең ҡартатай) ҡылыс тағып, шпорҙарын сыңлатып, тәртип урынлаштырып йөрөй. Ҡайһы берәүҙәргә, бигерәк тә кулактарға, яңы тәртип оҡшамай һәм уны, Бәҙретдин Күсәрбаевты, Мырҙағол Абдулғафаровты, һеҙҙе кантон үҙәгенә саҡыралар, тип алдап алып китәләр һәм юлда атып үлтерәләр — йәнәһе, ҡасырға маташҡандар. Был турала журналист Фәтих Саҙрый улы Абдуллин (Һөйөндөковтар затынан) бер нисә тапҡыр гәзиттәрҙә яҙып сыҡты. Ғөмүмән, ауыл тарихы буйынса Фәтих ағай күп материалдар туплаған.

1921—1922 йылдарҙағы аслыҡтан һуң ауылда 87 хужалыҡта 170 ир-ат, 225 ҡатын-ҡыҙ, барлығы 395 кеше ҡала, йәғни хужалыҡтар һаны 41-гә, ир-аттар 224, ҡатын-ҡыҙҙар 125 кешегә кәмей, бөтәһе 349 кеше һәләк була. Ҡайһы берәүҙәре ситкә сығып киткән. Был 1924 йылғы мәғлүмәт. 1917 йылғы перепись менән сағыштырғанда, ауылдың ҡап яртыһы юҡ була. Совет власының тәүге 5 йыллығы шулай фажиғәле үтә. 1918—1920 йылдарҙағы хәрби коммунизм сәйәсәте аслыҡты киҫкенләштерә, ҙур зыян килтерә: халыҡтың игенен тартып алалар, баҙар-сауҙа әйләнеше туҡтатыла. Шунлыҡтан халыҡ эшләмәй, сөнки барыбер хөкүмәт тартып ала. Крәҫтиәндәр сыуалышы башлана, ашлыҡ келәттәрен, тирмәндәрҙе, лавкаларҙы талайҙар. Иҙәштән 7 саҡырымдағы улус үҙәге Сабатар (урыҫ ауылы Чеботарево) баш күтәреүселәр ҡулына күсә, ләкин был хәрәкәт тиҙ баҫтырыла. Ике яҡтан да үлеүселәр күп була.

1926 йылдың декабрендә тәүге Бөтә союз переписе үткәрелә. Һәр кем хаҡында айырым ҡағыҙға енесе, йәше, милләте, туған теле, тыуған урыны, ғаилә хәле, белеме, шөғөлө, йәшәү сығанағы, һаулығы һәм башҡалар — бөтәһе 14 һорауға яуап яҙыла. Ул ҡағыҙҙар һаҡланһа, хәҙерге ауыл тарихы, үҙ быуыны менән ҡыҙыҡһыныусылар өсөн бик шәп мәғлүмәт булыр ине. Ләкин, үкенескә ҡаршы, дөйөм күрһәткестәр алынғас, ҡағыҙҙар юҡ ителә. Мәскәү етәкселеге тағы бер ҙур хата эшләй.

Шулай ҙа Үҙәк архивта ауыл буйынса йорт хужаһының исеме, милләте, ғаиләлә нисә ир-ат, нисә ҡатын-ҡыҙ барлығы яҙылған исемлек әлегә һаҡлана. Шуны 1920 йылда төҙөлгән исемлек менән сағыштырып, 1921 йылғы аслыҡта кем, күпме кеше һәләк булғанын яҡынса белеп була. Ауылдың юридик адресы: Йылайыр кантоны Үтәғол улусы Бикбирҙе ауыл советы. 93 хужалыҡта 211 ир-ат, 226 ҡатын-ҡыҙ, барлығы 437 кеше йәшәй.

1928 йылғы статистика буйынса, ауылда 94 хужалыҡта 464 кеше көн итә. Ауыл советы үҙәге Үтәғолға күсерелә, әммә әлегә Бикбирҙе ауыл советы булып ҡала. Күренеүенсә, ике йыл эсендә ауыл халҡы 24 кешегә, 1924 йылдан 1928 йылға тиклем 66 кешегә арта.

1928 йылда 10 батрак хужалығынан Фрунзе исемендәге колхоз төҙөлә. Күптәр, бигерәк тә хәлле йәшәгәндәр, ауылдың абруйлы аҡһаҡалдары күмәк хужалыҡҡа шик менән ҡарай, оҙаҡҡа барыуына ышанмай. Райком күрһәтмәһе буйынса, ауыл активтары, ярлы-ябаға кулактарҙың мал-мөлкәтен тартып алып, үҙҙәрен һөргөнгә ҡыуғас, колхоз эштәре яйға һалына.

Мәскәү күрһәтмәһе буйынса, кулактарҙан тартып алынған милектең яртыһы хөкүмәткә, икенсе яртыһы ауыл советына һәм күмәк хужалыҡ төҙөлөшөнә бирелә.

1936 йылда дүрт колхозсы "стахановсы" тип таныла. Улар — Ибентаров Хәмәтхан, Ураҡаев Хисам, Мусаҡаев Сибәғәт, Ҡыуандыҡов Саҙрый.

1939 йылдың декабрендә урындағы советтарға депутат "һайлайҙар". Тәүҙә хеҙмәт алдынғылары избирком ағзалары итеп күрһәтелә:

Байгилдина Әминә Карловна,
Аҙнабаев Әхмәт Вәлиәхмәт улы,
Ғайсаров Абдрахман Абхалик улы,
Һөйөндөков Рәхим Суфиян улы,
Әбүшахмин Вәли Ғәзим улы,
Ғайсарова Әсмә Сәлихйән ҡыҙы,
Фәйрушин Сәлихйән Көмөшбай улы,
Ҡыуандыҡов Ғәйнетдин Әхмәт улы,
Ҡыуатова Мәғрифә Әҙһәм ҡыҙы.

Ергәйештә "Көрәш" колхозы алдынғылары күрһәтелә:

Ильясова Зөбәйҙә Сәйфелмөлөк ҡыҙы,
Имелбаев Ишморат Ҡорманғәли улы,
Казбеков Дәминдәр Зөфәр улы,
Мусин Рәхим Йәрмөхәмәт улы.

Фрунзе исемендәге колхоз шул "Көрәш" колхозы менән ярыша.

1931—1934 йылдарҙа тәүҙә парторг, һуңынан колхоз рәйесе итеп Фәйзуллин Лотфулла Рәхмәтулла улы һайлана. Ул 1896 йылғы, башланғыс белемле. Тәүҙә батша армияһында, 1919—1921 йылдарҙа Ҡыҙыл Армияла хеҙмәт итә. Үҫәргән ревкомында отделение командиры вазифаһын башҡара, 1926 йылдан — партия ағзаһы. Ырымбур яғында тимер юлда кондуктор булып та эшләй. 1934 йылда мал үлеүенә юл ҡуйған өсөн партиянан сығарыла һәм 5 йылға хөкүм ителә. Мәскәүгә апелляция яҙа — 11 айҙан һуң азат ителә. 1938 йылда Үҙәк Комитеттың Контроль комиссияһы мәсьәләне ҡарап, Фәйзуллинды "перевести в сочувствующие" тигән ҡарар сығара. Беҙ бала саҡта уның тураһында, йәшеренеп йөрөгән бер ҡараҡты эҙе буйлап табып, ҡылыс менән сапҡылап ташлаған, тип һөйләйҙәр ине. Уҫал кеше булды. Һуғыш ваҡытында ла колхоз рәйесе итеп һайланды. Һуғыштан һуң да колхозда төрлө эштәр башҡарҙы. 1957 йылда үлде.

1935 йылдың июнендә колхоз парторгы итеп 1901 йылғы Уразаҡов Сабир Дәүләтгәрәй улын һайлайҙар. Беҙгә тиклем ул Муйнаҡ ауыл советындағы "Ҡыҙыл Урал" колхозы рәйесе була. Райком күрһәтмәһенә ҡарамайынса колхозсыларға иген таратҡаны өсөн уны партиянан сығаралар, судҡа бирәләр.

Колхоз рәйестәрен районда йыш алыштырып торалар. 1940 йылда 66 рәйестең утыҙы эшенән бушатыла, береһе үлә. 16 ауыл советы рәйестәренең 13-ө бушатыла, береһе мәңгелек донъяға күсә. Бәғзе бер аҡыллы рәйестәр колхоздан бушлай һыйыр алып, һуңынан баҙарға сығарып һатып китәләр.

1930 йылдың майында Иҙәш-Бикбирҙе ауылынан Хөббулла Мөхәмәтйәнов өс кешенән торған уғрылар төркөмө ойоштора. Уны халыҡ "Дөмпөш"

тип атай. Ул ауылдан китеп, урманда йәшәй, ат, аҙыҡ, кейем урлай, магазин талай, был эшкә һәйбәт кенә йәшәп ятҡан туғаны Вәлиҙе лә ылыҡтыра. Ауыл халҡы уны элек тә ҡамап тота, ләкин төрмәнән бер нисә тапҡыр ҡаса. Атаһы урта хәлле колхозсы була.

Шул өс ҡараҡ 12, 15 майҙа ҡорал менән ҡурҡытып, сәсеүҙәге кешеләрҙең һауыт-һабаларын, ашамлыҡтарын талап ала. 17 майҙа ике һарыҡ урлайҙар. Бер нисә көндән һуң Уразов Әскәттең һарайына кемдер ике ат бәйләп киткән. 24 май төнөндә Лукьян утарынан ике ат урлайҙар, икенсе көнө Ергәйештә Казбеков Дәминдәрҙең өйөнән өҫ кейемдәрен алып китәләр. Юнайҙа колхоз келәтенән 10 бот он, 5 ҡаҙаҡ май юғала. Ҡараҡтар келәттең түбәһен ҡутарып керәләр. 30 май көнө Иҙәш менән Юнай кешеләре йыйылып, ҡараҡтарҙы ауларға сыға. Йәшеренгән урынын табып, Вәли Мөхәмәтйәновты тоталар, ә теге икәүһен тапмайҙар. Һуңынан, көҙгә табан, "Дөмпөштө" Байыш ауылы яғында тоталар.

"Дөмпөштөң" ярты ғүмере урманда йә төрмәлә үтә. Олоғайғас ҡына Ҡыуат ауылына барып төпләнә. Йәштән ҡанына һеңгән уғрылыҡ тынғы бирмәгәндер, күрәһең, колхоз атын урлап һуйып, йәнә төрмәгә эләгә. Шунан әйләнеп ҡайтмай. Уның тураһында әле телгә алынған ауылдашыбыҙ, "Башҡортостан" гәзитенең хәбәрсеһе Фәтих ағай Абдуллин да яҙҙы.

Колхоздар ойошторолғас та колхозсыларҙы ауыл хужалығы менән бәйле булмаған төрлө эштәргә ҡушалар. 1931 йылдың 27 мартында район башҡарма комитеты Баймаҡҡа руда ташыу өсөн 3000 ылау ебәреү мәсьәләһен ҡарай. Сәсеү бөткәс тә 500 ылау ебәрергә булалар һәм колхоздарға разнарядка таратыла.

Май айында Йылайыр—Дубиновка трактын (Үтәғол аша) төҙөү өсөн ылау, кешеләр ебәреү буйынса хеҙмәт йөкләмәһе иғлан ителә. Юл Ҡыуандыҡҡа ла һалынырға тейеш була, тағы Күгәрсен—Ейәнсура (Бәкәтәр) трактын төҙөргә лә ҡарар итәләр. Ул ваҡытта район үҙәге Ейәнсурала ине.

1936 йылдың 7 мартында РИК һыйыры булмаған колхозсыларға мал бирергә тигән ҡарар сығара. Ундайҙар район буйынса 760 хужалыҡ иҫәпләнә. Шуларҙан 78 кеше буйҙаҡ, 27-һе колхоз ерендә йәшәгән эшсе һәм хеҙмәткәр. 68 хужалыҡҡа һыйыр алдағы йылда бирелә, ләкин улар йә һатып эсә, йә һуғым итә. Тағы 510 хужалыҡ ҡала. Шуларҙың 250-һенә ер бүлеге малды июнь айында, ҡалғандарына октябрь айында бирергә тейеш була. Тәү сиратта хеҙмәт алдынғыларына, ударниктарға һәм стахановсыларға бирергә тейештәр. Ҡайһы берәүҙәр малдан баш тарта, сөнки аҫрарға урын юҡ, ҡарауы мәшәкәт, йә ваҡ мал ала. Райондың ер бүлегенә малһыҙҙарҙың исемлеген алып, үҙ ваҡытында һыйыр менән тәьмин итеү бурысы йөкмәтелә. Ләкин төрлө сәбәптәр арҡаһында был эш үтәлмәй.

1937 йылдың ғинуарында 511 хужалыҡ һыйырһыҙ тип иҫәпләнә. Йыл буйына 204 хужалыҡҡа колхоз фермаларынан алып бирәләр, 183 хужалыҡҡа совхоздарҙан һатып алалар, 49 хужалыҡҡа колхозсыларҙан алалар. 1938 йылға 75 хужалыҡ ҡала, шуларҙың 12-һенә алдараҡ бирәләр, ләкин улар малды һуйып һата, 8 хужалыҡтың һыйырын, кулак тип, тартып алалар, 9 хужалыҡ дин буйынса мал тотмай икән, 36

хужалыҡ малдан баш тарта. Иҙәштәрҙең 3 хужалығы һыйыр, 8 хужалығы башмаҡ ала.

1935 йылдың 4 апрелендә партячейка ағзалары сираттағы йыйылыш уҙғара. 10 кеше һәм район инструкторы Әхмәтов, Үтәғолдан шура рәйесе Аҡсурина ҡатнашалар. Колхозсыларҙың II съезы, колхоз уставы, Испания хәбәрҙәре, сәсеүгә әҙерлек, мал ҡышлатыуға һығымта мәсьәләләре ҡаралғандан һуң, колхоз идараһына ағзалар тәҡдим итәлә: Ҡыуатов Иҙрис, Уразаҡов Сабир, Байгилдина Әминә, Дәүләтбаев, Ибентаров Мөхәмәтхан, Фәйзуллин Лотфулла. Ревизия комиссияһы ағзаларына Ишкинин Яҡуп, Ғайсаров Абдрафиҡ, Ҡунаҡбаев Фәтҡулла, Ҡыуандыҡова Зифа һайлана.

Йыйылышта мәктәптә уҡыу-уҡытыу торошо ла ҡарала. 1933—1934 уҡыу йылында 1 синыфта 9 бала, 3 синыфта 20 бала, бөтәһе 29 бала уҡый. Китапханала 32 китап, 241 дәреслек була. Мәктәпкә 5 гектар ер бүленгән, шуның 1 гектарында бойҙай, 1 гектарҙа тары, 0,5 гектарҙа көнбағыш сәселгән.

Ауыл советына һәм район етәкселегенә ҡарата ҡаты тәнҡит һүҙҙәренән һуң, мәктәп төҙөлөшөн тиҙләтергә һүҙ бирәләр.

1936—1937 уҡыу йылында 1 синыфта 18 бала, 2 — 15, 3 — 13, 4 — 15, бөтәһе 61 бала уҡый. 5 уҡыусы күсмәй ҡала. Мәктәп 4 бүлмәле, майҙаны 160 кв.м.

1937 йылда райком һәм райсовет етәкселәре районды икегә бүлеү тураһында һорап, сәбәптәрен аңлатып, Өлкә комитетҡа хат яҙа:

1. Райондың иң ситтәге ауыл советы үҙәктән 140 саҡырым алыҫлыҡта.

2. Бүленеш борондан килгән тәбиғи айырымлыҡ менән бәйле.

3. Иҡтисади яҡтан райондың көнсығышы Ырымбур өлкәһендәге тимер юлға яҡын.

4. Бүлеү мәсьәләһе һәр ваҡыт күтәрелеп килде.

Ысынлап та, районды икегә бүлеп, бер үҙәкте Иҫәнғолда ҡалдырып, икенсеһен Абзанда булдырыу мәсьәләһе күптән ҡуҙғатыла. 1934 йылға тиклем район үҙәге Ейәнсура ауылында, тимер юлдан 7—8 саҡырым алыҫлыҡта була. Тәүҙә округ, 1934 йылдан Ырымбур өлкәһе төҙөлгәс, сиктәре Башҡортостан иҫәбенә киңәйтелә һәм беҙҙең район үҙәге шул өлкәлә ҡала. Һуңынан район үҙәге беҙҙең яҡтарҙан алыҫлаша.

Районды бүлеү ҡарарын райсовет 1941 йылдың 19 июнендә ҡабул итә һәм 21 июндә Өфөгә хат яҙа. Ә икенсе көнөнә һуғыш сыға — уның ҡайғыһы булмай. Мәсьәлә һуғыштан һуң, 1946 йылда хәл ителә. Ләкин 10 йылдан һуң район элекке хәленә ҡайта. Тағы, элекке кеүек, гәзит-журналдар 10—15 көнгә һуңлап килә. Ҡыш миҙгелендә Иҙәштән Иҫәнғолға барыу 2—3 көнгә һуҙыла, йыйылышҡа, конференцияларға саҡырыу хәбәре һуңлап килә.

Һуғыш алдынан 1937—1940 йылдар бик ҡоро тора. 1939 йылғы уңыш алдағы йылға ҡарағанда кәм була. Район буйынса гектарынан бойҙай 1938 йылда 7,2 центер, 1939 йылда — 3,4 центнер, арыш 5,1—8,5 центнер, арпа 4,5—6,0 центнер, һоло 2,6—8,0 центнер, тары 2,0—4,5 центнер, борсаҡ 2,4—12 центнер, көнбағыш 4—8 центнер.

1940 йылда райондың 17 колхозы, шул иҫәптән Фрунзе исемендәге колхоз, уңыш йыя алмай, дәүләткә иген тапшырмай. Райкомдың беренсе секретары Нурғужа Миңдегужин 1941 йылдың 14 майында Өлкә комитеттан ярҙам һорай. Мал аҙығы етмәү сәбәпле, 150 ат, 500 һыйыр, 1100 һарыҡ һәм кәзә — бөтәһе 1900 баш мал үлә. Май башында аҙна буйы ҡар ҡатыш ямғыр яуып, йәнә 50 баш йылҡы малы үлә. Күп колхоздар хеҙмәт көнөнә иген алмай.

Яҙғы сәсеүҙә колхозсыларға, тракторсыларға ашарға булмай. Бесән әҙерләгәндә лә шул уҡ хәл ҡабатлана. Кәмендә 50 тонна иген кәрәк була. Баҙарҙа иген ҡиммәт, колхоздар һатып алырлыҡ түгел, тип яҙа район етәксеһе. Өлкә комитеттан хәбәр булмағас, икенсе хатты ул 3 июндә яҙа. 19 көндән һуғыш сыға.

Ауылдың әбейҙәре бала-сағалар менән Ҡыҙҙар түңенә сығып, ”Ҡарға буҡтаһы” ойоштора, Алланан ямғыр теләй, бер-береһен һыу менән ҡойондороп йөрөй. Башҡа ауылдарҙа ла ундай йола үткәрелә. Райондың ”Ударсы” гәзите был йоланы тәнҡитләп сыға.

Һуғыш алдынан ауылдың хәленә байҡау яһайыҡ. 1940 йылда Иҙәштә 91 хужалыҡ, 384 кеше (1939 йылда 412 кеше), шуларҙың эшкә һәләтлеләре — 254, йәғни 18—60 йәштәге ирҙәр — 99, 18—55 йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар — 94, үҫмерҙәр — 61. Колхоздың комсомол ойошмаһында 16 ағза.

1941 йылдың 15 июненән колхоз рәйесе Ишмырҙин Дәүләт Нәжми улы. Ферма мөдире Ураҡаев Нурислам Ғәлиәскәр улы, иҫәпсе Ҡунаҡбаев Ғибәт Абдулла улы, ҡошсолоҡ фермаһы мөдире Фатима Ишкинина. 1940 йылдың сентябренән тирмәнсе булып Илья Саплин эшләй.

Һуғыш алдынан колхоздың хөкүмәткә бирәсәге 1000 центнер иген. Инвентаре: 16 һабан, 48 ер тырмаһы, 6 сәскес, 8 бесән сапҡыс, 5 бесән тырмаһы, 6 урғыс, 2 елгәргес, 2 триер — орлоҡтарҙы таҙартыу машинаһы. Автомобиле, тракторы юҡ. Күрше ”Көрәш” колхозының йөк машинаһы һәм двигателе булған.

Хәҙер ауылыбыҙҙа 11 йыллыҡ мәктәп, ә беҙ уҡығанда башланғыс мәктәп ине. Шуға күрә 5—7 синыфты көн һайын йөрөп, 6 саҡырымдағы Үтәғолда уҡыныҡ, ә урта белемде 15 саҡырымдағы Байышта алдыҡ.

1959 йылда 10 синыфты яҡын-тирәләге 10 ауылдан килгән 16 егет һәм ҡыҙ тамамланыҡ, интернатта торҙоҡ. Интернат тигәне һалам менән ябылған ятаҡ ине (һалам менән үҙебеҙ яптыҡ). Бәләкәй бүлмәлә 5—6 карауат, өҫтәл, шунда уҡ дәрес әҙерләйбеҙ, ашарға бешерәбеҙ, йоҡлайбыҙ. Ҡыш көндәре утын әҙерләп, мейес яғып бүлмәне йылытабыҙ, яҙлы-көҙлө ишек алдында бешеренәбеҙ. Шулай ямғырлы көҙөн дә, ҡарлы ҡыш көндәрендә лә аҙналыҡ аҙыҡ йөкмәп йөрөп, 3 йыл уҡыныҡ. Яҙлы-көҙлө мөмкин булғанса тау, урман аша, йәмле Иҙәш, Үткәрмә йылғалары буйлап велосипед менән, ҡышын саңғы менән йөрөнөк. Үҫмер саҡ, йәшлек күңелле үтте. Хәҙер һағынып һөйләргә генә ҡалды.

Иҙәштән 10 синыфты өсәү — бер ҡыҙ, ике егет бөттөк. Ҡыуандыҡова Миңзада медучилище тамамлап, Мәләүез яғында эшләне, ни сәбәптәндер йәшләй вафат булды. Мөхәмәтйәнов Мырҙабай менән

икебеҙ бер йылда уҡырға индек. Ул армиянан һуң авиация институтында уҡыны, мин — университеттың тарих факультетында. Сессияларҙан һуң бергә ҡайта инек. Һуңынан ул инженер булып эшләне, мин беренсе интернатта тарих, йәмғиәт белемен уҡыттым. Хәҙер ҙә осрашып, шылтыратышып торабыҙ. Ейән-ейәнсәрҙәр үҫтерәбеҙ, ауылға ла ҡайтып йөрөйбөҙ, синыфташтар менән дә осрашабыҙ. Синыфташыбыҙ Фәтхиә Күсәрбаева Өфөлә йәшәй.

**Ауылдың үҫеше**

| Йылдар | Хужалыҡ | Кешеләр һаны | Ауылдың юридик адресы |
|---|---|---|---|
| 1795 | 25 | 138 | Ырымбур губернаһы<br>Үҫәргән улусы |
| 1816 | 24 | 272 | 9-сы башҡорт кантоны |
| 1859 | 93 | 665 | 3-сө кантон 2-се йорт |
| 1877 | 102 | 579 | Орск өйәҙе 2-се<br>Үҫәргән улусы |
| 1901 | 110 | 581 | — |
| 1917 | 132 | 800 | 6-сы Үҫәргән улусы |
| 1920 | 128 | 745 | Үҫәргән кантоны<br>Бикбирҙе ауыл советы |
| 1924 | 87 | 395 | Йылайыр кантоны<br>Үтәғол улусы<br>Бикбирҙе ауыл советы |
| 1926 | 93 | 437 | — |
| 1928 | 94 | 462 | — |
| 1939 | — | 412 | Ейәнсура районы<br>Үтәғол ауыл советы<br>Фрунзе исемендәге колхоз |
| 1946 | 67 | 262 | — |
| 1959 | — | 474 | Ворошилов исемендәге<br>колхоз бригадаһы |
| 1989 | — | 545 | Салауат исемендәге<br>колхоз бригадаһы |
| 1997 | — | 639 | ”Иҙәш” колхозы |
| 2002 | — | 665 | — |